*Фәнис СЕРБАЕВ*

## Ә ҺИН БАРҺЫҢ

Һин булмаһаң, был донъяла
Йәмһеҙ булыр ине.
Минең өсөн йәшәү ерҙә
Тәмһеҙ булыр ине.
Һин булмаһаң, һандуғастар
Моңһоҙ булыр ине.
Минең яҙған шиғырҙарым
Тоҙһоҙ булыр ине.
Һин булмаһаң, анау ҡыҙ ҙа
Һылыу булыр ине.

Шуны ҡосаҡлау ҙа миңә
Йылыу булыр ине...
Ә һин барһың! Донъя йәмле
Йәшәү миңә тәмле.
Һин йылытаң минең йәнде,
Йылытаһың тәнде.
Ә һин барһың! Барһың! Барһың!
Барһың! — бәхетлемен,
Һиңә мәңге, мәңге, мәңге,
Мәңге рәхмәтлемен!

## МАРТ БУРАНЫ

Урам буйы һыуыҡ, март бураны
Улай-былай йөрөй ҡаңғырып.
Шул буранды ҡарап тәҙ(е)рәнән,
Ултырамын өйҙә яңғыҙым.
Бер кем дә юҡ, өй эсе буш, йәмһеҙ,
Буп-буш ҡалған һымаҡ ауыл да.
Буран ғына йөрөй тынғы тапмай —
Хәлкәйҙәре әллә ауырмы?
...Арыуҙанмы, ҡапыл туҡтап ҡала,
Башын эйеп, тора уйланып.
Оҙаҡламай йәнә өйөрөлөп,
Урынынан китә ҡуҙғалып.
Ҡарайым да шуны уйлап ҡуям:
Беҙ икебеҙ оҡшаш түгелме?
Оҡшашбыҙ шул, ана, тәҙ(е)рәгә
Ҡарлы йәше әллә түгелде?
Бәлки, ул да бөгөн минең һымаҡ
Һөйгәненән үтә йыраҡтыр.
Анау тауҙар, ошо ятҡан ауыл
Уға ла бөтөнләй сит-яттыр.
Бәлки, ул да эсе яҙмышынан
Ҡаңғыралар уҙмыш табалмай.
...Йәнә тауға китте март бураны,
Ҡарап ултырамын күҙ алмай.

## ЭХ!

Бошонҡоло уйҙар менән
Ҡарап торам мейескә.
Әле йәшмен, был йәшемдә
Бошонмаҫҡа тейеш тә.
Тик булмай шул, донъяһы ла
Әллә ниндәй ауыр бит.
Мейестә ут һүнеп бара,
Шуны күреү ауыр бик.
Яңы ғына тоҡандырҙым,
Шарт та шорт яна ине.
Ҡыҙыулығы, дәрте менән
Күңелгә дауа ине
Әле бына һүнеп бара,
Ҡуҙҙар ҡарая һаман.
Эй, аллам, ниндәй оҡшашбыҙ,
Уйлауы ауыр, яман.
Мин дә ошо ҡуҙҙар кеүек
Яйлап һүнәм, һүреләм.
Ут һүнмәҫ тә... Ана, утын,
Мин утынға үреләм.
Торонбаштарҙы болғайым,
Тоҡанып китте утым —
Эх, миңә лә, тимен, тормош
Йәлләмәһәсе утын!